Башҡортостан Республикаһы
Баймаҡ ҡалаһы һәм район мәғариф бүлеге

# Ҡолсора урта мәктәбенә 75 йыл



Баймаҡ районының Ҡолсора ауылы хозур тәбиғәтле Һаҡмар йылғаһы буйында урын алған.



Үҙенең юбилейын билдәләүсе Ҡолсора урта мәктәбенең башланғысы 1930-1931 йылда Зәйнулла мулла өйөндә асылған. Унда тәүҙә тик малайҙар ғына уҡығандар, уларға белемде Әүәлбаева Нәзифә биргән.

I-II класта Ҡолсора мәктәбендә уҡығандар, ә III класҡа 4 км. алыҫлыҡтағы Муллаҡай мәктәбенә йөрөп белем алғандар.

1937 йылда мәктәп 4 йыллыҡ тип үҙгәртелә. Бында Айытбаев Шәкирйән, Биктимирова Файза һәм Буранбаев Барыйҙар эшләй.



Кильдебаева Ғ.Ә.

1947-1948 йылда 60 бала уҡый. I-III кластарҙы Кильдебаева Ғилминур Әхсән ҡыҙы, II-IV кластарҙы Самарбаев Сайфулла Сафый улы уҡыта. Китаптар етешмәгән (20 балаға 2 әлифба), кейем яғына ла ҡытлыҡ булған, шулай булыуға ҡарамаҫтан, балалар уҡыуға бик теләп йөрөгәндәр.



Сәитов Р.Ә.

Мәктәптең тирә-яғын йәшелләндерееү маҡсатында, уҡытыусылар уҡыусылар менән берлектә баҡса эшләп, ағас ултыртҡандар.

Ошо башланғыс мәктәптә 1959-1960 йылдарҙа Сәитов Рафаэль Әкрәм улы үҙенең хеҙмәт юлын башлай.



1960-1961 йылда Ҡолсора ауылында 7 йыллыҡ мәктәп асыла. (Муллаҡай 7 йыллыҡ мәктәбе күсә).

Мәктәп директоры Ғәлекәев Хәмит Сәғит улы була.



Ғәлекәев Х.С.

1961 йылдан мәктәпте Арсланбаев Әкрәм Солтан улы етәкләй. Уның менән бергә


Арсланбаев Ә.С.


Аллабердин К.С.


60-сы йылдарҙағы мәктәп коллективы


Самарбаева Я.Б.




Моратов Х.Ғ.


1961 йылда эшләгән уҡытыусылар

Мөхәмәтйәнов Ә.Ф., Ғәлиев С.Х., Мазгаров Р.В., Кильдебаева Ғ.Ә., Сиргалина Б.Ә., Әминева М.З., Аҡкулова К.М., Мазгарова С.Х., Моратов Х.Ғ., Фәйзуллина М.С., Аллабердин К.С., Гатиятуллин А.Н., Аллаяров Н.З., Аллаярова М.З., Абдуллина З.З. эшләйҙәр.

1963 йылда 7 йыллыҡ мәктәп 8 йыллыҡ тип үҙгәртелә.


Яҡупов Ф.А.

1967 йылда Арсланбаев Ә.С. «Ирәндек» совхозына партком секретары итеп эшкә күсереү сәбәпле, мәктәп директоры итеп Яҡупов Фәрит Абдулла улы тәғәйенләнә.

Ул йылдарҙа оло быуынға алмашҡа Кужабаева Р.И., Мостафина Р.Г., Моратова Р.Г., Мусина Р.М., Утәбаева Х.М., Баязитовтар килә.

Шулар менән бер рәттән Ягафарова З.К., Вәлиева Р.З., Мостакимова Н.Й., Арсланбаева З.К., Хисамов Ф.Ф., Үҙәнбаев Ә., Сынғыҙов Б.К.,



Моратова З.Б.



Кужабаева Р.И.



Мусина Р.М.



Мостафина Р.Г.



Йәнсурин Р.Х.









Хисамов Ф.Ф.



З.Иғбаева, Үҙәнбаев, Йәнтимерова



1966 йылғы сығарылыш



Баязитова Г.Х., Баязитов Ф.Ф.

Мөхәмәтйәнов Р.С., Самарбаева Р.З., Сәитова Ф.В. һәм Сәитова М.В.

1970-1971 уҡыу йылының ҡышҡы каникулынан һуң мәктәп яңы бинаға (2 ҡатлы) күсә.



1972-1974 йылдарҙа мәктәп теҙгенен Азаматов Сабирйән Шөғәйеп улы тота. Мәктәп коллективын тулыландырып йәш кадрҙар килә: Ғөбәйҙуллин З.К.,



Мәктәп коллективы

Йәнсурин Р.Х., Әбсәләмовтар, Мөхәмәтйәновтар, Моратовтар, Шәйәхмәтова С.Р., Мөхәмәтйәнова М.Й., Сулеймановтар килә, Хасановтар.

1971-1972 йылда урта мәктәп тип үҙгәртелә һәм I сығарылыш - 1973 йылда сығарыла.



Утябаев Х.М.



Аллаяров З.А.



1 сығарылыш уҡыусылары



Хасанов А.Д.



1970-80 йылдарҙа эшләүсе уҡытыусылар коллективы



Нигматуллина М.Н.



Самарбаева Р.С.



Самарбаева Н.С.

1974 йылда Азаматов С.Ш. РОНО мөдире итеп район үҙәгенә эшкә алалар. 1974-1978 йылдарҙа мәктәпте етәкләү эше кире Арсланбаев А.С. иңенә төшә. Ҡолсора урта мәктәбенә 4 ауылдан (Муллаҡай, Үрге Иҙрис,



2-се сығарылыш уҡыусылары



Әхмәтҡужина М.Б.



Абдуллина Т.М.

Түбәнге Иҙрис, Ҡолсора) уҡыусылары 2 сменала уҡый. Ошо йылдарҙа мәктәп тулыландырыла: Әхмәтҡужина М.Б., Абдуллина Т.М.



1978-1987 йылдарҙа Рәжәпов Миҙхәт Шәкүр улы мәктәпте етәкләй. Үҙҙәренең хеҙмәт юлын Мостафин Ә.Ғ., Аллаяровтар, Баязитовтар, Хәсәновтар, Сынғыҙовтар, Самарбаева Н.Я., Абҙаков Ш.Ш., Ғафаровтар, Ҡурбанаева С.С., Хәсәнова Ф.М., Утарбаева Л., Шарипова З.Я., Иҙелбаева Р.Х., Әминева И.Й., Бикбердина Ф.Ә., Ғалина Н.М., Сыңғыҙов Р.И., Абдуллина Ф.А. ошо мәктәптә башлай.



1987-2002 йылдарҙа Әхмәтҡужина Миңнур Билал ҡыҙы мәктәп коллективы менән етәкселек итә. Сәғитов Булат Мирза улы, Ишмырҙин Ришат Садиҡ улы тәүге аҙымдарын ошо мәктәптә башлайҙар.

Ҡолсора мәктәбе коллективында үсеп килеүсе йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү өлкәһендә арымай-талмай эшләгән, уҡыусылар, ата-әсәләр абруйын яулаған уҡытыусыларыбыҙ хеҙмәтен хөкүмәтебеҙ юғары баһалай.

«Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы» исеменә Ҡужабаева Ирина Исхаҡ ҡыҙы, Рәжәпов Миҙхәт Шәкүр улы, Моратов Хәким Ғаззали улы, Мостафина Роза Ғөбәйт ҡыҙы, Федорова Разия Сергей ҡыҙы, Мостафина Рәмзиә Шәһәрғәзи ҡыҙы,



Әхмәтҡужина М.Б.

Баязитов Фәрит Әғзәм улы, Баязитова Мәғәфура Хәйрулла ҡыҙы, Абдуллина Тәнзилә Миңлебай ҡыҙы, Мөхәмәтйәнова Мәстүрә Йосоп ҡыҙы, Мөхәмәтйәнов Фәрит Әбдрәхим улы, Әхмәтҡужина Миңнур Билал ҡыҙы, ә «Башҡортостан республикаһының мәғариф алдынғыһы» исеменә Баязитова Рина Йосоп ҡыҙы лайыҡ булды.

«Рәсәй Федерацияһының мәғәриф алдынғыһы» һәм «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» исеменә Әхмәтҡужина Миңнур Билал ҡыҙы һәм Ниғматуллина Миңзифа Насип ҡыҙына бирелә.

Ҡолсора мәктәбендә хеҙмәт юлын башлап, эш тәжрибәһе туплап юғары урын биләгән уҡытыусылар ҙа етерлек. Мәҫәлән: Ғөбәйҙуллин Зәкир Ҡаһарман улы, Сәғитов Булат Мирза улы, Аллаяров Зиннәт Абдулла улы - мәктәп директорҙары.

Абдуллина Тәнзилә Миңлебай ҡыҙы, Йәнсурин Рауил Хөрмәт улы, Ишмырҙин Ринат Садик улы - ауыл хәкимиәте башлығы вазифаһын башҡаралар.

Ҡолсора мәктәбендә белем һәм тәрбиә алған уҡыусылар төрлө профессия кешеләре. Улар илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә намыҫ менән эшләйҙәр.

Фән өлкәһендә ныҡышмалы эшләп профессор дәрәжәһенә күтәреүселәр беҙҙең ғорурлығыбыҙ:

Дәүләтшин Р.Ә. - медицина

Мөхәмәтйәнов С.Ә. - философия

Фазуллин Й.Й. - математика

Мостафин Ә.Ғ. - химия

Аллаяров З.А. - педагогия фәндәре кандидаты

Шәйәхмәтов Ф.Ә. - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы

Моратов Ю.Х. - һәүәҫкәр композитор

Сәитов Р.Ә. - Республиканың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре.

Былар барыһы ла Ҡолсора мәктәбенең емеше һәм уның бәҫен күтәреүселәр. Улар менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ.